Нафиҡова З.Г., Рәхмәтуллина Ф.З.

# Матур һөйләшәм

телмәрҙә тел кәмселектәре булған балаларға ауыр әйтелешле өндәрҙе ҡуйыу өсөн дәрестәр өлгөһө

**Өфө – 2011**

Нафиҡова З.Г., Рәхмәтуллина Ф.З.

# Матур һөйләшәм

тел кәмселектәре булған балалар өсөн ауыр әйтелешле өндәрҙе ҡуйыуға дәрестәр өлгөһө

**Өфө – 2011**

УДК
ББК
Н

**Нафиҡова З.Ғ., Рәхмәтуллина Ф. З. Матур һөйләшәм:** тел кәмселектәре булған балалар өсөн ауыр әйтелешле өндәрҙе ҡуйыуға дәрестәр өлгөһө: Методик ҡулланма. – Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты нәшриәте, 2011. – 64 бит.

Был методик ҡулланма телмәрендә кәмселектәре булған балаларға ауыр әйтелешле өндәрҙе ҡуйыуға бағышлана. Ҡулланма бөгөнгө көн талаптарына ярашлы өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү эшенең йөкмәткеһен асып бирә һәм ошо йүнәлештә төрлө эш төрҙәрен тәҡдим итә.

Уҡытыусы-логопедтарға, тәрбиәселәргә, гувернерҙарға, ата-әсәләргә, шулай уҡ урта һәм юғары профессиональ педагогик уҡыу йорттарының студеттарына методик әсбап рәүешендә тәҡдим ителә.

Рецензенттар:

*Сынбулатова Ф.Ш.,* **педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институты доценты**

**Вәлиева Н.М., Өфө ҡалаһы Киров районының 40 - сы һанлы балалар баҡсаһы мөдире**

# Аңлатма һүҙ

Кешегә тыуған теле һулаған һауаһы, эскән һыуы, аяҡ баҫып йөрөгән ере кеүек тәбиғи һәм ғәҙәти була. Тел кешелек йәмғиәтендә аң менән бергә барлыҡҡа килгән һәм уға ғына хас күренеш.

Телһеҙ аралашып, аңлашып булмай. Телһеҙ шәхестең, кешелек йәмғиәтенең, фәндең, техниканың, мәҙәниәттең үҫеше мөмкин түгел. Шуның өсөн дә ул ил тойғоһо кеүек үк изге була. Тел белеү - илде, халыҡты белеү менән бер.

Тел быуындар бәйләнеше вазифаһын да үтәй. Тел аша оло быуын йәш быуынға үҙенең тормош тәжрибәһен, өгөт-нәсихәттәрен, рухи байлығын тапшыра килгән. Фәҡәт тыуған тел генә ата-бабаларҙың үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәккә өмөт-хыялдарын, тормошон аңларға, уларҙың йөрәк серҙәрен сисергә, күңел төрҙәренә үтеп инергә ярҙам итә. Шунлыҡтан тыуған телдең бөтә нескәлектәрен дә өйрәнеү, белеү мотлаҡ тип һанала. Тыуған телгә баланы өйрәтеү ата-әсәләрҙең, уҡытыусыларҙың, тәрбиәселәрҙең, йәмғиәт эшмәкәрҙәренең изге бурысы.

Телде үҙләштереү һәләте балаға тыумыштан бирелә. Әсә ҡарынында уҡ бала әсәһенең тауышын ишетеп, киләсәктә үҙе һөйләшәсәк телдең үҙенсәлектәре менән таныша. Донъяға килгәс, бала ғаиләлә үҙ телен үҙләштерә. Әгәр ата-әсә үҙҙәре матур итеп тыуған телдә һөйләшә икән, уларҙың телмәре бала өсөн үрнәк булып тора һәм балаға киләсәктә донъяны танып белергә, кешеләр менән аралашыуға асҡыс булып тора.

Балалар баҡсаһында телмәр үҫтереү эше маҡсатлы рәүештә алып барыла: бала өндәрҙе дөрөҫ әйтергә, уларҙы ишетеп, һүҙ эсендә уларҙың урынын таба белергә өйрәтелә. Өндө аңлатҡан билдәнең – хәрефтең киҫмә төрө менән таныштырыу, дөрөҫ итеп һөйләмдәр төҙөп, үҙенең уй-фекерен башҡаларға еткерергә, йомаҡ сисергә, мәҡәл, шиғыр, хикәйәнең мәғәнәһенә төшөнөргә өйрәтеү кеүек һәм башҡа төрлө эштәр башҡарыла.

Ләкин бөгөнгө көндә башҡорт балалар баҡсаһында эшләүсе педагогтарға был өлкәлә кәрәкле методик әсбаптар етешмәй.

Тәҡдим ителгән методик ҡулланма балалар баҡсаһының өлкән төркөмдәренә йөрөгән балаларға логопедия дәрестәрен башҡорт телендә үткәреү өсөн ярҙам маҡсатында нәшер ителде. Сөнки бөгөн мәктәпкә уҡырға төшкән беренсе класс уҡыусыларының күбенеһенең телмәрендә тел кәмселектәре осрай. Бигерәк тә өндәрҙе дөрөҫ

әйтмәү, уларҙы “йотоу”, йәғни төшөрөп ҡалдырыу, боҙоп әйтеү, һ.б. йыш осрай.

Өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү – киң төшөнсә. Ул телмәрҙәге өн кәмселектәрен бөтөрөүгә генә ҡайтып ҡалмай, ә баланың һүҙ байлығын арттырыуға, грамматик яҡтан дөрөҫ һәм бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеүҙе лә, фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүҙе лә үҙ эсенә ала.

Балаларҙың телмәрен үҫтереү эше бөтә төркөмдәрҙә лә төп бурыстарҙың береһе булып тора. Был методик ҡулланмала бирелгән һәр дәрескә бер үк маҡсат ҡуйыла:

1. өнгә характеристика биреү;
2. өндө ҡуйыу һәм дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен нығытыу;
3. балаларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, бәйләнешле телмәрен үҫтереү;
4. балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен, иғтибарын, хәтерен, бармаҡ, ҡул хәрәкәтсәнлеген үҫтереү;
5. дөрөҫ һәм матур итеп һөйләргә өйрәнеү теләге тәрбиәләү.

Өндәрҙе ҡуйыу эше түбәндәге тәртиптә бирелгән:

- өндөң киҫмә хәрефен күрһәтеү;
- өнгә характеристика биреү;
- артикуляция күнегеүҙәре үткәреү;
- өндө төрлө образдарҙа биреү;
- өндө ижектәрҙә биреү;
- өндө ритмик юлдарҙа биреү;
- өндө һүҙҙә, һөйләмдәрҙә биреү.

Өндәрҙең дөрөҫ әйтелешенә ирешеү өсөн телмәр аппаратының анык эшләүе талап ителә. Дәрестә көн һайын артикуляция гимнастикаһын үткәрергә кәрәк.

Әсбапта яҡынса артикуляция күнегеүҙәре бирелә, һәр күнегеүҙе 5 — 6 тапҡыр башҡарырға кәрәк:

- ауыҙҙы ҙур итеп асырға һәм бер нисә секунд тоторға;
- «Ҡойма» — ирендәр асылып, йылмайыу рәүешен ала, тештәр ҡыҫылған;
- «Торба» — ирендәрҙе борғо кеүек бөрөштөрөп, алға табан һуҙыу;
- «Йылмайыу» һәм «Торба» күнегеүҙәре алмашлап башҡарыла.
- «Сәғәт» — телде уңға-һулға йөрөтөү;
- «Аттар» — телде шартлатып, ат сабыуы тауышын сығарыу;
- «Ҡалаҡ» — яҫы телде ауыҙҙан киң итеп сығарырға, телдең урта һәм артҡы өлөшө өҫкө яҡ тештәргә тейә;
- «Көрәк» — яҫы телде сығарып, көрәк һымаҡ итеп аҫҡы иренгә һалыу;
- «Энә» — телде энә һымаҡ ослайтып алға сығарыу;
- «Бәүелсәк» — яҫы телде өҫкә-аҫҡа йөрөтөү;
- «Ҡоймаҡ» — яҫы телде аҫҡы иренгә һалыу;
- «Томшоҡ» — ауыҙ асыҡ, иренде түңәрәкләтеп алға һуҙыу;
- «Тәмле варенье» — ауыҙ асыҡ, ирендәр йылмайыу төҫөн ала, яҫы тел менән өҫкө ирендән ауыҙ эсенә ҡарай хәрәкәт эшләү;
- «Маляр» — ауыҙ асыҡ, ирендәр йылмайған рәүештә, яҫы телде аңҡау буйлатып алға-артҡа йөрөтөү, эйәкте ҡыбырлатмаҫҡа;

- «Гармун» — ауыҙ асыҡ, ирендәр йылмайған рәүештә, яҫы телде ныҡ итеп аңҡауға терәргә һәм телде аҫҡа төшөрмәй генә ауыҙҙы асырға һәм ябырға.

Методик ҡулланмала  өндәр мәҙәниәтен үҫтереү проблемаһына бәйле  материалдар ҙа тәҡдим ителә.

Дәрестә баланың фонематик ишетеү һәләтен һәм хәтерен үҫтереүгә, һүҙ байлығын арттырыуға, грамматик төшөнсәләрҙең айышын аңлауға күнегеүҙәр бирелә. Бәйләнешле телмәр үҫтереү өсөн һөйләмдәр төҙөү, бәләкәй текстың йөкмәткеһен һөйләү, шиғырҙар ятлау алымдары ҡулланыла.

Баланың  телмәр үҫеше, ҡул суҡтарының һәм бармаҡтарҙың етеҙ хәрәкәттәр башҡара алыуына бәйләнгән. Бармаҡ хәрәкәттәре яҡшы үҫһә, баланың телмәре лә үҫешә. Бармаҡ хәрәкәттәрен үҫтереүгә массаж эшләү, рәсем, әүәләү, йәбештереү һәм ҡайсы менән эшләү ҙур булышлыҡ итә.  Шуның өсөн дә методик ҡулланмала бармаҡ уйындарына, һүрәт төшөрөүгә, йәбештереүгә ҙур иғтибар бирелә.

Ҡулланмала башҡорт халыҡ ижадынан әйтемдәр, йомаҡтар, тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр файҙаланылды.

# *Тема: [Ҙ] өнө өҫтөндә эш*

## Беренсе дәрес

Өндөң артикуляцияһы:

Ҙ өнөн әйткәндә ирендәр йылмая, яҫы телдең осо аҫҡы һәм өҫкө тештәр араһында урынлаша, телдең урта өлөшө өҫкө тештәргә тейә; телдең уртаһынан һалҡын һауа сыға.

Ҙ өнө һүҙ башында, уртаһында, аҙағында ҡулланыла. Ҙ өнө яңғырау тартынҡы.

1. Артикуляция күнегеүҙәре:

“Йылмайыу”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Ҡоймаҡ”, “Ҡойма”.

2. Өноҡшаш уйын.

Ҙ-ҙ-ҙ-ҙ- бал ҡорто бал йыя.

3. Ҙ өнөн ижектәрҙә әйт:

| | | |
|---|---|---|
| ҙа | аҙ | аҙа |
| ҙо | оҙ | оҙо |
| ҙы | ыҙ | ыҙы |
| ҙу | уҙ | уҙу |
| ҙө | өҙ | өҙө |
| ҙә | әҙ | әҙә |

4. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

Ҙа-ҙа-ҙа- ҡаҙан

Ҙа-ҙа-ҙа-быҙау

Ҙы-ҙы-ҙы-ҡыҙыҡ

Ҙы-ҙы-ҙы-аҙыҡ

5. Һүҙҙәрҙә ҙ өнө булһа, сәпәкәй итергә.

Быҙау, китап, тоҙ, Аҡбуҙат, балан, ҡымыҙ, ат, ҡоҙоҡ, ҡаҙ, ҡунаҡ, йоҙаҡ.

6. Ял итеү минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы рәүештә хәрәкәттәр эшләү.

Беҙ ҙур булып үҫәбеҙ
Бейегерәк, бейегерәк,
Ҡыйыҡтарға етәбеҙ.
Бер, ике – күтәрелдек,
Өс, дүрт – ултырҙыҡ.

7. Һүҙҙәрҙе иҫеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла.

а ) ҡаҙ – баҙ – тоҙ – яҙ
б ) ҡаҙау – быҙау – ҡаҙыҡ – ҡуҙаҡ

8. Һүҙҙәрҙе күплектә әйт.

Ҡаҙ -  ... (ҡаҙҙар)
Ҡыҙ - ... (ҡыҙҙар)
Малай - ... (малайҙар)
Йондоҙ - ... (йондоҙҙар)

9. Йомаҡтар.

а ) Утта янмай, һыуҙа батмай.
(Боҙ)

б ) Бәләкәй генә бер көсөк
Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә.
(Йоҙаҡ)

10. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

1.Артикуляция күнегеүҙәре.

“Йылмайыу”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Ҡоймаҡ”, “Ҡойма”.

2. Бал ҡорто бал йыя: ҙ-ҙ-ҙ-ҙ.

3. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

Аҙ – аҙ – аҙ – баҙ
Уҙ – уҙ – уҙ – һуҙ
Оҙ – оҙ – оҙ – тоҙ
Ыҙ – ыҙ – ыҙ – ҡымыҙ

4. **Ҙ** өнө булған һүҙҙәрҙе әйт:

5. “Һүрәтте тап” уйыны:
а) *ҙ* өнөнә һүрәт һайлау;
б) һүрәттәге предметтың исемен дөрөҫ әйтеү;
в) һүҙҙә *ҙ* өнөнөң урынын билдәләү.

6. Ял минуттары:

Беҙ барабыҙ, барабыҙ.
Беҙ еләккә барабыҙ.
Ҡыҙыл еләк табабыҙ ҙа,
Ауыҙҙарға ҡабабыҙ.

7. “Берәү һәм күп” уйыны

*Балаларға конверттар таратыла. Карточкала бер төрлө предметтар төшөрөлә, тик береһендә берәү, икенсеһендә күп.*

Ҡаҙ – ҡаҙҙар, ҡыҙ – ҡыҙҙар, йоҙаҡ – йоҙаҡтар, йондоҙ – йондоҙҙар.

*Һүрәткә ҡарап, бала үҙенең парын эҙләй, һөйләм төҙөйҙәр.*

а) Миндә ҡаҙ төшөрөлгән.
б) Ә миндә ҡаҙҙар төшөрөлгән.

8. Һүрәткә ҡарап, һөйләмдәр төҙө.

9. Телтөҙәткесте ятла:

Ҙа – ҙа – ҙа - ҡаҙҙар киткән һуң ҡайҙа?
Ҙы – ҙы – ҙы – ҡаҙҙар йылғаға барҙы.

10. Йомғаҡлау.

# Өсөнсө дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

2. Бер тын сығарыуҙа, оҙаҡ итеп **ҙ – ҙ – ҙ** өнөн әйтергә.

3. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

Ыҙ – ыҙ – ыҙ - ҡымыҙ
Ыҙ – ыҙ – ыҙ - ҡумыҙ
Ыҙ – ыҙ – ыҙ - һағыҙ
Оҙ – оҙ – оҙ - боҙ
Оҙ – оҙ – оҙ – тоҙ
Уҙ – уҙ – уҙ - туҙан
Уҙ – уҙ – уҙ – ҡуҙ
Аҙ – аҙ – аҙ - ҡаҙан
Аҙ – аҙ – аҙ – ҡаҙау

4. Үткән дәрестәге һүҙҙәрҙе иҫеңә төшөрөп әйт:

Ҡаҙ, ҡыҙ, йоҙаҡ, баҙ, ҡуҙ, тоҙ, ҡымыҙ, ҡаҙау, быҙау, ҡаҙаҡ, ҡуҙаҡ.

5. Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.

6. **Ҙ** хәрефен яҙ.

7. Ҡырҡма хәрефтәрҙән түбәндәге һүҙҙәрҙе яҙ:

Тоҙ  ҡаҙ  боҙ  ҡуҙ

8. Ял минуттары.

Ҡаҙҙар остолар, остолар.
Остолар ҙа ергә төштөләр.
Ултырҙылар, һыу эстеләр,
Торҙолар ҙа тағы остолар.

9. “Һүҙҙе әйтеп бөт” уйыны

ҡымы...  то...

ҡағы... ту...
һағы... бо...
ҡумы... ҡа...

10.Шиғырҙы ятла:

Ҡаҙ.

Яңы яуған ҡар өҫтөнән
Ҡаҙҙар лап-лап үттеләр.
Ҡыҙыл тәпәйҙәре менән
Йондоҙ яһап киттеләр.

11. Бармаҡтарың менән ҡаҙҙың башын эшлә.

Терһәкте өҫтәлгә ҡуябыҙ. Дүрт бармаҡты, баш бармаҡтан башҡа, алға тура һуҙып, бер-береһенә терәйбеҙ. Ҡаҙҙың башы була. Баш бармаҡты әҙ генә аҫка төшөрәбеҙ. Асыҡ суҡышлы “Ҡаҙ” килеп сыға.

12. Геометрик фигураларҙан “Ҡаҙ” һүрәтен эшлә.

13. Йомғаҡлау.

# Дүртенсе дәрес

**Өнгә характеристика: тартынҡы, яңғырау, нәҙек**

Өндөң артикуляцияһы: **ҙ’** өнөн әйткәндә ирендәр йылмая, тел осо тештәр араһына ҡыҫылып әйтелә.

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Йылмайыу”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Көрәк”, “Ҡойма”, “Ҡоймаҡ”

2. Бер тын сығарыуҙа оҙаҡ **ҙ – ҙ – ҙ** өнөн әйтеү.

3. **Ҙ’** өнөн ижектәрҙә әйтеү:

Ҙә – ҙә – ҙә
Ҙе – ҙе – ҙе
Ҙү – ҙү – ҙү
Ҙи – ҙи – ҙи

Ҙө – ҙө – ҙө

4. Ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе әйт:

Ҙә – ҙә – ҙә – иҙән
Ҙе – ҙе – ҙе – Иҙел
Үҙ – үҙ – үҙ – күҙем
Иҙ – иҙ – иҙ – биҙрә
Ҙө – ҙө – ҙө – йөҙөк
Өҙ – өҙ – өҙ – көҙгө

5. Һүҙҙәрҙе иҫеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла. Һүҙҙәр тәртибен үҙгәртеп ҡабатларға:

Көҙгө – биҙрә – иҙән – күҙ

6. Ял итеү минуттары. Һүҙҙәргә ярашлы рәүештә хәрәкәттәр эшләү:

Беҙ, беҙ, беҙ, беҙ
Беҙ, беҙ, беҙ генә.
Бармағыбыҙ төҙ генә,
Ҡул ҡанатын ҡағабыҙ,
Сәпәкәйләп алабыҙ.
Билде алға бөгәбеҙ,
Шунан инде сүгәбеҙ.
Тағы ҡанат ҡағабыҙ,
Тәрән һулыш алабыҙ,
Ултырабыҙ шым ғына
Һәм тыңлайбыҙ тын ғына.

7. Һүҙҙәрҙе сәпәкәйләп ижектәргә бүл:

Иҙән, көҙгө, күҙ, биҙрә, мөгөҙ, көҙән.

8. *Ҙ* өнөнә һүҙҙәр әйтәм, ҡалын тартынҡы булһа, бер тапҡыр сәпәкәй ит, нәҙек булһа – ике тапҡыр.

*Ҡыҙыл, ҡаҙҙар, көҙ, йоҙаҡ, иҙән, быҙау, ҡымыҙ, биҙәк, йондоҙ, көҙгө, ҡумыҙ.*

9. *Көҙ, ҡымыҙ, быҙау* һүҙҙәре менән һөйләмдәр төҙө.

10. Телтөҙәткесте ятла:

Ҙа – ҙа – ҙа - ҡаҙҙар киткән һуң ҡайҙа?
Ҙы – ҙы – ҙы – ҡаҙҙар йылғаға барҙы.
Ҙә – ҙә – ҙә – рәхәтләнеп эй йөҙә,
Ҙы – ҙы – ҙы – ҡыумағыҙсы ҡаҙҙарҙы.

11. “Көҙ” шиғырын ятла.

Көҙ килгән, көҙ килгән.
Көҙ быйыл бик тиҙ килгән.
Ҡайындар, тирәктәр, талдар
Һарынан күлдәк кейгән.

12. “Көҙ” һүрәтен төшөр.

13. Йомғаҡлау.

# *Тема: [Ç] өнө өçтөндә эш*

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика:   тартынҡы,  һаңғырау,   калын***

Өндөң артикуляцияһы: **ç** өнөн әйткәндә, ирендәр йылмайғандағы һымаҡ асыла, тештәр бер аҙ ҡыçыла, телдең осо яçырып, тештәр араһына килә, тик тел ҡыçылып, дерелдәмәй генә әйтелә.

**Ç** өнө һүҙ уртаһында, аҙағында ҡулланыла.

1. Артикуляция  күнегеүҙәре.
“Йылмайыу”, “Томшоҡ”, “Ҡоймаҡ ҡойоу”, “Тештәрҙе таҙартыу”

2. Йылан ыçылдай: ç – ç – ç – ç.
Ҡаҙ ыçылдай: ç – ç – ç – ç.

3. Ижектәрҙе дөрөç әйт:

aç – aç – aç
oç – oç – oç
уç – уç – уç
ыç – ыç – ыç

4. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе әйт:

aç – aç – aç – балаç
aç – aç – aç – баçма
aç – aç – aç – таçма
aç – aç – aç – таçтамал
уç – уç – уç – уçаҡ
уç – уç – уç – уçал
oç – oç – oç – боç

5. Һүҙҙәрҙе дөрөç әйт һәм иçеңдә ҡалдыр:

Һайыçҡан, арыçлан, юлбарыç, ҡырмыçҡа.

6. Ял итеү минуттары

Һүҙҙәргә ярашлы рәүештә хәрәкәттәр эшләү:

Бер, ике – беҙ баçабыҙ,
Өс, дүрт – беҙ атлайбыҙ,
Биш, алты – ныҒыраҡ баç,
Ете, һигеҙ – тиҙерәк боç!

7. “Һүҙҙе әйтеп бөт” уйыны.

Ыл...
Бал...

8. Хәҙерге заманда үҙгәрт:

Балаçҡа баçыу
(мин балаçҡа баçам, һин..., ул..., беҙ..., һеҙ..., улар...)

9. ШиҒырҙы ятла:

Баç, ҡыҙым, Әпипә,
Һин баçмаһаң, мин баçам.
Һинең баçҡан эҙҙәреңә

Мин дә килтереп баҫам.

10. Аппликация “Балаҫ”

11. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

***Өнгә характеристика:   тартынҡы,   һаңғырау,   нәҙек***

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Йылмайыу”, “Томшоҡ”, “Ҡоймаҡ ҡойоу”, “Тештәрҙе таҙартыу”

2. ҫ’- ҫ’ - ҫ’ – оҙаҡ әйтеп ҡарау.

3. Ижектәрҙе ҡабатла:

Әҫ – өҫ – үҫ – иҫ
Өҫ – үҫ – иҫ – әҫ
Үҫ – иҫ – әҫ – өҫ
Иҫ – әҫ – өҫ – үҫ

4. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

Бәҫ,  кәбеҫтә,  өҫтәл,  кеҫәртке

5. *Кәбеҫтә, өҫтәл, кеҫәртке*   һүҙҙәре менән һөйләм төҙө.

6. Ял минуттары.

Ел иҫә беҙҙең биткә,
Ағастарҙы һелкетә.
Ел бөтә, бөтә, бөтә,
Ағастар бейек үҫә.

7. Һүҙҙәрҙе, сәпәкәй итеп, ижектәргә бүлеү.

Кәбеҫтә, өҫтәл, кеҫәртке, бәҫ.

8. Минең арттан ҡабатла:

Ҫа – ҫа – ҫа – ҡайһылай матур баҫа,

Ҫа – ҫа – ҫа – тыпырлап ҡына баҫа.
Аҫ – аҫ – аҫ – шундай матур балаҫ.
Ҫә – ҫә – ҫә – шундай көслө ел иҫә.

9. Киҫмә хәрефтәрҙән һүҙ яҙ:

Бәҫ.

10. Шиғырҙы ятла.

Ел иҫә, ел иҫә,
Иртән дә иҫә, кис тә иҫә.
Кемдең, кемдең күргәне бар,
Ел була ниндәй төҫтә?

11. Йомғаҡлау.

## *[Ҡ]  өнө өҫтөндә эш*

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика:  тартынҡы,  һаңғырау,  калын***

**Ҡ** өнөнөң артикуляцияһы: ауыҙ уртаса асыҡ, ирендәр йәйелә; телдең артҡы өлөшө аңкауға күтәрелеп әйтелә, тел тартыла, яҫы; тештәр асыла.

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Ҡойма”, “Томшоҡ”, “Тау яһайыҡ”
Ҡарға әйтә: ҡар – ҡар – ҡар.
Тауыҡ саҡыра: ҡыт – ҡыт – ҡыт .

2. Ижектәрҙе әйт:

Ҡа – ҡа – ҡа
Ҡы – ҡы – ҡы
Ҡо – ҡо – ҡо
Ҡу – ҡу – ҡу
Аҡ – аҡ – аҡ
Ыҡ – ыҡ – ыҡ

Ҡк – ок – оҡ

3. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе әйт:

Ҡа – ҡа – ҡа – ҡаҙ
Ҡа – ҡа – ҡа – ҡалаҡ
Ҡу – ҡу – ҡу – ҡунаҡ
Ҡа – ҡа – ҡа – ҡаҙау
Ҡы – ҡы – ҡы – ҡымыҙ
Ҡо – ҡо – ҡо – ҡолон
Аҡ – аҡ – аҡ – бысаҡ
Ыҡ – ыҡ – ыҡ – ҡыуыҡ

4. Һүҙҙәрҙе тыңлап иҫеңдә ҡалдыр. **[Ҡ]** өнө булған һүҙҙе ҡабатлап әйт:

Ҡаҙ, баҙ, быҙау, ҡаҙау, ҡымыҙ, ҡолаҡ, балаҫ, ҡалаҡ.

5. Һүрәткә ҡарап исемдәрен дөрөҫ әйт:

Һүрәттәр: ҡалаҡ, ҡарбуз, ҡыйыҡ, ҡаҙ, ҡайсы, ҡарға, ҡуян, алҡа, балдаҡ.

6. Һөйләмдәрҙе ҡабатлап әйт:

Баҡсала ҡыяр үҫә.
Әсәй ҡоймаҡ ҡоя.
Ҡартатай ҡымыҙ эсә.
Ҡуяндың ҡолағы оҙон, ә ҡойроғо ҡыҫҡа.
Ҡалаҡ менән бутҡа аша.

7. Телтөҙәткесте ятла:

“Поезд килә: туҡ – туҡ – туҡ ,
Вагондары: тыҡ – тыҡ – тыҡ “

8. **Ҡ** хәрефен иғтибар менән ҡара, һауала бармағың менән яҙ; аҙаҡ - дәфтәргә яҙ.

9. Мәҡәлде ятла, мәғәнәһен аңлат:

Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр.

10. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Ҡойма”, “Томшоҡ”, “Тау яһайыҡ”

Ҡарға әйтә: ҡар – ҡар – ҡар.

Тауыҡ саҡыра: ҡыт – ҡыт – ҡыт .

2. **Ҡ – ҡ – ҡ – ҡ** өнөн бер тын сығарыуҙа әйтеү.

3. Ижектәрҙе дөрөҫ әйт:

Ҡа – ҡо – ҡу – ҡы

Ҡо – ҡу – ҡы – ҡа

Ҡу – ҡы – ҡа – ҡо

4. Үткән дәрестәге һүрәттәрҙе иҫеңә төшөр һәм атамаһын әйт:

5. Һүҙҙе әйтеп бөтөр:

Ҡа ...

Ҡо ...

Ҡу ...

Ҡы ...

6. Ял итеү минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр эшләү:

Тышҡа сыҡтыҡ,

Бысҡы алдыҡ,

Утын алдыҡ:

Зыңҡ-дыңҡ, зыңҡ-дынҡ!

Ике ҡулға балта тоттоҡ,

Утын ярҙыҡ:

Таҡ-тоҡ, таҡ-тоҡ!

Өйгә ҡайттыҡ.

7. Тиҙәйткесте ҡабатла:

“Ҡара ҡарға ҡарҙан бара,

Ҡанатын ҡаға-ҡаға”

8. Шиғырҙы ятла:

Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,
Ҡолағы ергә тейгән.

9. Йомғаҡлау.

## Өсөнсө дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Ҡойма”, “Томшоҡ”, “Тау яһайыҡ”
Ҡарға әйтә: ҡар – ҡар – ҡар.
Тауыҡ саҡыра: ҡыт – ҡыт – ҡыт .

2. “Бутка бешерәм” бармаҡ уйыны.

3. **Ҡ – ҡ – ҡ – ҡ** өнөн бер тын сығарыуҙа бышылдап, ҡысҡырып әйтеү.

4. Баҫымды үҙгәртеп, ижектәрҙе әйт:

Ҡа – ҡа – ҡа
Ҡа – ҡа – ҡа
Ҡа – ҡа – ҡа
Ҡо- ҡо – ҡо
Ҡо- ҡо – ҡо
Ҡо- ҡо – ҡо
Ҡы – ҡы – ҡы
Ҡы – ҡы – ҡы
Ҡы – ҡы – ҡы

5. Һүҙҙәрҙе ҡабатла:

*Ашҡабаҡ, ҡыяр, ҡалаҡ, алҡа, ҡурай, ҡорот, ҡыш, ҡоҙоҡ, ҡолон, ҡаҙау, ҡымыҙ, ҡурсаҡ, таҡта.*

6. Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.

7. Ял итеү минуттары:

Ел иҫә беҙҙең биткә,
Ағастарҙы һелкетә.
Ел бөтә, бөтә, бөтә,
Ағастар бейек үҫә.

8. Ҡырҡма хәрефтәрҙән һүҙҙәр яҙ:

Ҡаҙ, ҡош, ҡыш, ҡул.

9. Шиғырҙы ятла:

Ҡуян ҡунаҡҡа бара
Ҡулыңа бүләк тотоп,
Ҡупшы итеп кейенеп
Ҡайҙа киттең, үрғуян,
Оҙон ҡолаҡ – Шуҡҡуян?

Яҡын дуҫым Энәкәйҙең
Тыуҙан көнө бит бөгөн.
Бөтәһенән алдараҡ
Ҡотлайым әле үҙен.
(Ә. Раҡаева)

10. Йомғаҡлау.

## *[Ғ] өнө өҫтөндә эш*

## Беренсе дәрес

*Өнгә характеристика: тартынкы, яңғырау*

**Ғ** өнөнөң артикуляцияһы: **ғ** өнөн әйткәндә ирендәр, тештәр бер аҙ асыла; телдең осо уртала тора; телдең артҡы өлөшө аңкауға күтәрелә, тауыш дерелдәп өн сыға.

**Ғ** өнө һүҙ башында, уртаһында ҡулланыла.

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Йылмайыу”, “Көрәк”, “Ҡойма”, “Бәүелсәк”, “Тау”, “Тештәрҙе таҙартыу”.

2. Бармаҡ уйындары:

Сығанаҡ бармаҡ

Сығанаҡ тип аталам,
Сығып китәм туғайға.
Сығып түгел, осоп китәм
Атланып буҙ турғайға.

3. Бер тын сығарыуҙа оҙаҡ ғ, ғ’ өндәре булған ижектәрҙе әйт:

Ға – ға – ға – ға
Ғ’ә – ғ’ә – ғ’ә – ғ’ә

4. **Ғ** өнөн образдарҙа биреү:

а) Тамаҡҡа һыу һалып сайҡайбыҙ: ғ – ғ – ғ – ғ.
б) Ҡаҙҙар ҡысҡыра: ға – ға – ға.

5. Ижектәрҙе ҡабатла:

Ға – ғо – ғу – ғы
Ғо – ғу – ғы – ға
Ғә – ғө – ғү – ғе
Ғө – ғү – ғе – ғә

6. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе әйт:

Ға – ға – ға – ҡарға
Ға – ға – ға – дағa
Ғы – ғы – ғы – салғы
Ға – ға – ға – ағас
Ғо – ғо – ғо – йәйғор
Ғә – ғә – ғә – сәғәт
Ғә – ғә – ғә – Ғәзилә

7. Предметлы һүрәттәргә ҡарап, уларҙың атамаһын дөрөҫ әйт:

Һандуғас, ҡарлуғас, ҡарға, турғай.

8. Дидактик уйын “Дүртенсе артыҡ”;

Һандуғас, ҡарлуғас, ҡарға, баҡа.

Һуңынан ҡоштар тураһында һөйлә.

Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.

9. Ял минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр эшләү:

Турғайҙар осто, турғайҙар осто.
Остолар ҙа остолар.
Ултырҙылар, ял иттеләр,
Тағы осоп киттеләр.
Турғайҙар остолар, остолар
Ултырҙылар, ял иттеләр.

10. “Һүҙҙе әйтеп бөтөр” уйыны:

Ҡар... (ға)
Да... (ға)
Ду... (ға)
Ҡара... (ғат)
Ту... (ған)
Һу... (ған)
Сал... (ғы)
Ям... (ғыр)

11. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүл:

Йылға, Ағиҙел, Арғымаҡ, ағас, алмағас.

12. **Ғ** хәрефен таяҡсалар менән яҙ; һуңынан дәфтәреңә яҙ:

13. Йомғаҡлау.

# Икенсе дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Йылмайыу”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Ҡоймаҡ”, “Ҡойма”.

2. Бармаҡ уйындары.

Урта бармағым – үрғуяным,
Үҙе бигерәк уңған.
Шундай етеҙ йүгерә –
Ел артынан өлгөрә.

3.Бер тын сығарыуҙа оҙаҡ әйтергә:

Ға – ға – ға – ға
Ғә’ – ғә’ – ғә’ – ғә’

4. **Ғ** өнө булған һүҙҙәрҙе әйт.

5. Ялғауҙарҙы дөрөҫ ҡуйып, һөйләмде тамамла:

Марат магазин... китте.
Ҡаҙҙар йылға... китте.
Һуған... һыу ҡой.
Өфө ҡалаһында Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйыл... .

6. Мин һүҙҙәр әйтәм, ә һин шуларҙан һөйләм төҙө.

а) Боҙҙар, китә, йылға.

*Йылғала боҙҙар китә.*

б) Ғәзилә, һуған, һыу, ҡой.

*Ғәзилә, һуғанға һыу ҡой.*

в) Ҡырағай, йәшәй, хайуан, урман.

*Ҡырағай хайуандар урманда йәшәй.*

7. Телтөҙәткесте ҡабатла:

Ға – ға – ға – әйҙә киттек урманға,
Ға – ға – ға – унда еләк йыйырға.

8. Ял итеү минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр эшләү:

Турғайҙар осто, турғайҙар осто.

Остолар ҙа остолар.
Ултырҙылар, ял иттеләр,
Тағы осоп киттеләр.
Турғайҙар остолар, остолар
Ултырҙылар, ял иттеләр.

9. *Ҡак, сыҡ* һүҙҙәрен өлгө буйынса үҙгәрт:

| | |
|---|---|
| Мин ҡағам | Беҙ ҡағабыҙ |
| Һин ҡағаһың | Һеҙ ҡағаһығыҙ |
| Ул ҡаға | Улар ҡағалар |
| Мин сығам | Беҙ сығабыҙ |
| Һин сығаһың | Һеҙ сығаһығыҙ |
| Ул сыға | Улар сығалар |

10. Шиғырҙы ятла.

Турғай.
Алмағастың ботағына
Ҡунып алған да ҡошсоҡ,
“Ҡул ҡаушырып, тик ултырма,
Баҡсаға, - ти, - эшкә сыҡ!”
(Ф. Мөхәмәтйәнов)

11. “Баҡсала” тигән темаға һүрәт төшөр.

12. Йомғаҡлау.

## *[Ң] – [Ң’] өндәре өҫтөндә эш*

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика: тартынкы, һаңғырау***

**Ң** өнөнөң артикуляцияһы: ауыҙ бер аҙ асыла,аҫҡы эйәк аҫҡа төшә, яҫы телдең осо аҫҡы тештәргә тейә, артҡы өлөшө өҫкө аңҡауға күтәрелеп, тамаҡ төбөн ҡаплап әйтелә.

**Ң** өнө һүҙ уртаһында, аҙағында ҡулланыла.

**Ң** өнөн образдарҙа биреү:

1. Ҡыңғырау зыңлай: зың – ң – ң , зың – ң – ң!

1. Артикуляция күнегеүҙәре:

”Йылмайыу”, “Томшоҡ”, “Торба”, “Бәүелсәк” .

2. Бармаҡ уйындары.

Һуҡ бармағым – сысҡан -
Баҙҙың эсенә боҫҡан.
Ялап ултыра ҡаймаҡ,
Ике күҙе йылтырап.

3. **Ң** өнө булған ижектәрҙе әйт:

| | |
|---|---|
| ңа | аң |
| ңо | оң |
| ңу | уң |
| ңы | ың |
| ңи | иң |
| ңә | әң |
| ңө | өң |

4. **Ң** өнө булған һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

Кәңәш, сиңерткә, таң, ҡуңыҙ, һөңгө, моң, өң, күңел, ең, аңлатма, аң, саң, саңғы.

5. Зат менән үҙгәрт:

| | |
|---|---|
| Минең саңғым | Беҙҙең саңғыбыҙ |
| Һинең саңғың | Һеҙҙең саңғығыҙ |
| Уның саңғыһы | Уларҙың саңғыһы |

6. *Саңғы* һүҙе менән һөйләм төҙө:

7. Телтөҙәткесте ҡабатла:

а) Ңө – ңө – ңө – ана айыуҙың өңө.

б) Сәғәт һуға – даң – даң!

Хәбәр бирә таңдан!

8. Ял итеү минуттары:

Әкрен генә сағанды ел һелкетә,
Уң яҡҡа һелкетә, һул яҡҡа һелкетә,
Бер эйелдек, ике эйелдек
Бына шулай ял иттек!

9. Ятла:

Ҡыңғырауҙар зың – зың зыңлай,
Башҡорт ҡыҙы сулпыһындай,
Зың – зың, зың – зың!

10. Ҡыңғырау һүрәтен төшөр.

11. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

1. Артикуляция һәм бармаҡ күнегеүҙәре.

2. Бер тын сығарыуҙа **ң** өнө булған ижектәрҙе әйт:

Ңы – ңы – ңы
Ңи' – ңи' – ңи'

3. Ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт.

Иң – иң – иң – миң
Өң –өң – өң – һөңгө
Аң – аң – аң – таң
Аң – аң – аң – саңғы
Оң – оң – оң – моң
Ең – ең – ең – ең

4. Бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө:

Саңғы, ҡыңғырау, ҡуңыҙ.

5. Йомаҡтарҙы сис:

а) На-а, тиһәң – атламай.
Тр-р, тиһәң – туҡтамай.
Бесән һалһаң – ашамай.
Ҡысҡыра – ҡысҡыра саба,
Йүгереүҙән бушамай.
(машина)

б) Ауыҙы бар – көйшәмәç,
Теше бар – тешләмәç,
Ултырһаң – күтәрер,
Етәкләһәң – эйәрер.
(ат)

6. Ҡырҡылған һүрәттәрҙе йәбештер (ҡуңыҙ, саңғы, ҡыңғырау).

7.Ял минуттары.

Әкрен генә сағанды ел һелкетә,
Уң яҡҡа һелкетә, һул яҡҡа һелкетә,
Бер эйелдек, ике эйелдек
Бына шулай ял иттек!

8. Телтөҙәткесте ҡабатла:

һең – һең – һең – ҡайҙан ҡайтып киләһең,
һаң – һаң – һаң – ял итеп ал арыһаң.
һәң – һәң – һәң – дәртле баçып йөрөһәң,
һәң – һәң – һәң – бөтә эшкә өлгөрһәң,
һең – һең – һең – теләгеңә етерһең.

9. Ҡырҡма хәрефтәрҙән һүҙҙәр яҙ һәм **ң** өнөнөң урынын тап:

Таң, моң, саң.

10. Йомғаҡлау.

***С өнө өçтөндә эш***

# Беренсе дәрес

*Өнгә характеристика:* *тартынкы, һаңғырау*

**С** өнөнөң артикуляцияһы: ирендәр йылмайғандағы кеүек бер аҙ асыла; тештәр бер аҙ ҡыҫыла; телдең осо яҫы, аҫҡы тештәр араһында урынлаша; һалҡын һауа сыға.

**С** өнө һүҙ башында, һүҙ уртаһында, һүҙ аҙағында ҡулланыла.

1. Бармаҡ гимнастикаһы.

Сәтәкәй бармаҡ
Минең исемем – сәтәкәй,
Үҙем бигерәк бәләкәй
Ҡаймаҡ ялап, һөт эсәм,
Ҡасан инде ҙур үҫәм?

2.Тын алыуға күнегеүҙәр.

“Кәмә йөҙҙөрөү”, “Ҡулды йылытыу”.

3. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Йылмайыу”, “Ҡойма”, “Көрәк”, “Ҡоймаҡ”, “Тештәрҙе таҙартыу”.

4. **С** өнөн образдарҙа биреү.

Һыу крандан нисек аға?
С – с – с – с

5. Са, сы ижектәрен әйт:

| | | |
|---|---|---|
| а) са | са – са | са – са – са |
| сы | сы – сы | сы – сы – сы |

б) баҫымды үҙгәртеп әйт:

| | |
|---|---|
| са – са – са | сы – сы – сы |
| са – са – са | сы – сы – сы |

са – са – са                сы – сы – сы

6. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

са – са – са – сана
са – са – са – самауыр
са – са – са – салғы
сы – сы – сы – сыбыҡ
сы – сы – сы – сынаяҡ
сы – сы – сы – сыуаҡ
са – са – са – оса
са – са – са – йыуаса
са – са – са – ҡоҙаса

7. Иҫеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла:

Сана,  самауыр, ҡоҙаса, йыуаса, ҡурайсы, йырсы, сынаяҡ.

8. Ял минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы тейешле хәрәкәттәр эшләү:

Ҡулдарҙы күтәрҙек,
Аҫҡа төшөрҙөк.
Ҡулдарҙы йәйҙек,
“Ҡайсы” эшләнек,
Ҡулдар талдылар,
Аҫҡа төштөләр,
Урында йүгерҙек,
Яҡшы тын алдыҡ,
Ял итергә ултырҙыҡ.

9. Һүрәттәргә ҡарап, предметтың атамаһын дөрөҫ әйт:

Сым, салғы, уҡыусы, уҡытыусы, сана, самауыр, сынаяҡ.

10. Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө:

Уҡыусы, сана, самауыр

11. Бирелгән эштәрҙе үтә:

а) **С**  хәрефен алфавиттан тап;

б) уң ҡулыңдың һәр бармағы менән сиратлап һауала **С** хәрефен яҙ;

в) һул ҡулыңдың һәр бармағы менән сиратлап һауала **С** хәрефен яҙ;

г) ике ҡулың менән бер юлы **С** хәрефен яҙ;

д) **С** хәрефен дәфтәреңә яҙ.

12. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

1. Бармаҡ уйындары. “Сәтәкәй бармаҡ” уйыны.

2. **С – с – с** өнөн бер тын сығарыуҙа оҙаҡ һуҙып әйт.

3. Үткән дәрестәге **С** өнөн аңлатҡан хәрефте иҫеңә төшөр һәм башҡа хәрефтәр араһынан табып күрһәт:

4. Ижектәрҙе дөрөҫ әйт:

Со – со – со
Су – су – су
Са – со – су – сы
Са – су – сы – со
Су – сы – са – со

5. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

Со – со – со – соҡор
Со – со – со – солоҡ
Со – со – со – солан
Су – су – су – суйын
Су – су – су – суртан
Су – су – су – сумка

6. Һүрәттәрҙе ҡулланып, һөйләмде әйтеп бөтөр:

Сания тауҙа ... (сана) шыуа.
Һауала ... (самолет) оса.

(Суйында) аш бешә.
Самат ... (ултырғыста) ултыра.

7. Ял минуттары.
Һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр эшләү:

Әкрен генә сағанды ел һелкетә,
Уң яҡҡа һелкетә, һул яҡҡа һелкетә,
Бер эйелдек, ике эйелдек
Бына шулай ял иттек!

8. Телтөҙәткесте ҡабатла:

Са – са – са - был бит беҙҙең Миңниса,
Са – са – са - тыпырлап күңел аса.

9. Туп менән уйын “Һүҙ уйла”.

Әйтелгән өн менән башланған һүҙ уйларға:
А – алма, ат, аш, ағай
С – сумка, суйын, солан, суртан
У – утын, ут, ултырғыс, урман.

10. Шиғырҙы ятла.

Тышта ҡар яуа,
Ниндәй саф һауа.
Әйҙә сығайыҡ,
Саңғы шыуайыҡ.

11. Был шиғырҙан **с** өнлө һүҙҙәрҙе айырып әйт.

12. Дәфтәреңә саңғы һүрәтен эшлә.

13. Йомғаҡлау.

## Өсөнсө дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

2. Бармаҡ уйындары.

“Сығанаҡ бармаҡ уйындары”

3. **С – с – с** өнөн бер тын сығарыуҙа оҙаҡ һуҙып әйт.

4. Ижектәрҙең рәтен иҫеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла.

| | |
|---|---|
| Са – су – сы – со | со – сы – са – су |
| Са – сы – со – су | со – сы – су – са |
| Са – су – со – сы | со – са – су – сы |
| Са – сы – су – со | со – са – сы – су |

5. Үткән дәрестәге тиҙәйткесте ҡабатла:

Са – са – са - был бит беҙҙең Миңниса,
Са – са – са - тыпырлап күңел аса.

6. Һүрәттәрҙе ҡарап сыҡ һәм дөрөҫ әйт.

Һүрәттәр: *солоҡ, сумаҙан, сумка, суртан, сынаяҡ, сынйыр, саңғы, саған, тас, уҡытыусы, һандуғас, ағас, алмағас, сана, ҡалас.*

а) **са** ижекле һүҙҙәрҙе табып әйт (саған, сана, саңғы);
б) **су** ижекле һүҙҙәрҙе табып әйт (сумаҙан, сумка, суртан);
в) **сы** ижекле һүҙҙәрҙе табып әйт (сынаяҡ, сынйыр, уҡытыусы);
г) **ас** ижекле һүҙҙәрҙе табып әйт (тас, һандуғас, алмағас, ҡалас, ағас).

7. Ял минуттары.

Ҡулдарҙы күтәрҙек,
Аҫҡа төшөрҙөк.
Ҡулдарҙы йәйҙек,
“Ҡайсы” эшләнек,
Ҡулдар талдылар,
Аҫҡа төштөләр,
Урында йүгерҙек,
Яҡшы тын алдыҡ,
Ял итергә ултырҙыҡ.

8. Телтөҙәткесте ҡабатла:

Са – са – са - был бит беҙҙең Миңниса,
Са – са – са - тыпырлап күңел аса.
Са – са – са - дәртләндерәм: “Их, ас са!”
Са – са – са - бейей шулай башҡортса.

9. Йомаҡтың яуабын тап:

Ҡарап торһаң – йәне юҡ,
Тупраҡ ашай, һыу эсә,
Үҙе юғары үҫә.
(ағас)

10. *Ағас* һүҙе менән һөйләм төҙө.

11. Хәҙерге заманда үҙгәрт:

ағас ултыртыу

| | |
|---|---|
| мин ағас ултыртам | беҙ ағас ултыртабыҙ |
| һин ағас ултыртаһың | һеҙ ағас ултыртаһығыҙ |
| ул ағас ултырта | улар ағас ултырталар |

12. Ағас һүрәтен эшлә.

13. Йомғаҡлау.

# Дүртенсе дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

2. **С – с – с** өнөн бер тын сығарыуҙа оҙаҡ һуҙып әйт.

3. Ижектәр рәтен дөрөҫ әйт һәм иҫеңдә ҡалдыр:

ас – ос – ус – ыс
ос – ус – ыс – ас
ус – ыс – ас – ос
ыс – ас – ос – ус

4. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

ас – ас – ас – тас
ас – ас – ас – ағас
ас – ас – ас – ҡалас
ас – ас – ас – ананас
ос – ос – ос – космос
ос – ос – ос – кокос
ус – ус – ус – фикус
ус – ус – ус – кактус
ус – ус – ус – автобус

5. “Һүҙҙе әйтеп бөтөр” уйыны.

| | | |
|---|---|---|
| та... | коко... | компа.... |
| анана... | автобу... | фику... |
| батму... | фику... | коко... |
| фоку... | какту... | ҡала... |

6. Ял минуттары.

Ҡулдарҙы күтәрҙек,
Аҫҡа төшөрҙөк.
Ҡулдарҙы йәйҙек,
“Ҡайсы” эшләнек,
Ҡулдар талдылар,
Аҫҡа төштөләр,
Урында йүгерҙек,
Яҡшы тын алдыҡ,
Ял итергә ултырҙыҡ

7. Һүҙҙәрҙә ниндәй өн барлығын әйт:

Ас, ос, тас

8. Ҡырҡма хәрефтәрҙән һүҙҙәр яҙ:

Тас, сос

9. Телтөҙәткесте ҡабатла:

ас – ас – ас – өҫтәлдә ананас
ас – ас – ас – бында торма, бар ҡас.
ас – ас – ас – ҡарлуғас-
Ҡайтырға сыҡ, ҡар булғас.

10. Шиғырҙы ятла:

Ҡыш булғас.
Ҡар яуғас,
Ҡыш булғас,
Бар ағас
Яланғас.
(Р. Ғәрипов)

11. Ҡағыҙҙан ҡырҡып, ҡар бөртөгөн эшлә.

12. Йомғаҡлау.

# *[С'] өнө өҫтөндә эш*

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика:* тартынҡы, һаңғырау, һыҙғырыусан, йомшаҡ**

**С'** өнөнөң артикуляцияһы: ирендәр йылмая, тештәр ҡойма кеүек ҙур булмаған ара ҡалдырып ябыла; тел яҫы, йомшартылған; телдең осо аҫҡы тештәр араһында урынлаша. Ауыҙҙан сыҡҡан һауа ағымы һалҡын.

1. Артикуляция күнегеүҙәре.
“Йылмайыу”, “Ҡойма”, “Көрәк”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Ҡоймаҡ ҡойоу”, “Бесәй асыулана”.

2. **С – с’** өндәрен образдарҙа биреү.
- Ҙур крандан һыу нисек аға?
- С – с – с

- Бәләкәй крандан һыу нисек аға?
- С’ – с’ – с’

3.Бер тын сығарыуҙа һуҙып  с’ – с’ – с’  өнөн әйтеү.

4. Ижектәрҙе ҡабатла:

| | |
|---|---|
| сә – сә | сә – сә – сә |
| се – се | се – се – се |
| сү – сү | сү – сү – сү |
| си – си | си – си – си |
| сө – сө | сө – сө – сө |
| | |
| сә – сә – сә | сә – сә |
| се – се – се | се – се |
| сү – сү – сү | сү – сү |
| си – си – си | си – си |
| сө – сө – сө | сө – сө |

5. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатла:

сә – сә – сә - сәғәт
сә – сә – сә – сәй
сә – сә – сә – сәйнүк
сә – сә – сә – сәүкә
се – се – се – себен
се – се – се – сейә
се – се – се – селек
сү – сү – сү – сүл
сү – сү – сү – сүп
сү – сү – сү – сүлмәк
си – си – си – сик
си – си – си – сикә
си – си – си – сиҙәм
сө – сө – сө – сөй
сө – сө – сө – сөйәл

6. Бирелгән һүҙҙәр менән һөйләм төҙө:

Сүп, сәйнүк, сейә.

7. Ял минуттары:

Сәп – сәп – сәпәкәй –
Минең ҡустым бәләкәй.
Ҡулын күтәргән була,
Сәпәкәй иткән була.

8. Йомаҡтарҙың яуабын тап:

а) Көн үткәнде кем белә,
Мин онотһам, ул белә.
(сәғәт)
б) Үҙе мейес башында,
Үҙе тун ябынып йоҡлай.
(бесәй)

9. *Бесәй* һүҙе менән һөйләм төҙө.

10. Шиғырҙы ятла:

Бесәй

Бесәй, бесәй, бесәй шул,
Бесәй әле бәләкәй.
Үҙе мырлай ҙа мырлай,
Әллә ул шулай йырлай?
(К. Даян)

11. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре:

“Йылмайыу”, “Ҡойма”, “Көрәк”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Ҡоймаҡ ҡойоу”, “Бесәй асыулана”.

2. Бармаҡ уйындары:

Сәтәкәй бармаҡ

Минең исемем – сәтәкәй,
Үҙем бигерәк бәләкәй
Ҡаймаҡ ялап, һөт эсәм,
Ҡасан инде ҙур үҫәм?

3. **С' – с' – с'** өнөн бер тын сығарыуҙа оҙаҡ итеп һуҙып әйт.

4. Ижектәрҙең баҫымын үҙгәртеп әйтеү:

| | | |
|---|---|---|
| сә – сә – сә | се – се – се | си – си – си |
| сә – сә – сә | се – се – се | си – си – си |
| сә – сә – сә | се – се – се | си – си – си |

5. Ижектәрҙе ҡабатла һәм иҫеңдә ҡалдыр:

сә – се – сү – си
се – сү – си – сә
сү – си – сә – се
си – сә – се – сү

6**. Се, си** ижегенә башланған һүҙҙәр уйла:
(Сейә, селек, себен, сeләү, ситек, силәк, сибәр, ситән, сикә, сиҙәм, сер, селтәр).

7. Ял минуттары.
Һүҙҙәргә ярашлы тейешле хәрәкәттәр эшләү:

Мин атлайым,
Һин атлайһың.
Аяҡтар тыпырлайҙар:
Тып та тып, тып та тып.
Мин йырлайым,
Һин йырлайһың,
Ә ҡулдарға күңелле:
Сәп тә сәп, сәп тә сәп.

8. Телтөҙәткесте ҡабатла:

Сибәр, Сәймә һәм Сәлимә
Сәй эсәләр өсәүләп.

Султан ситтә сәсәй – сәсәй
Сәй көтә был өсәүҙән.

9. “Һауыт-һаба магазины” уйыны.

**С – с’** өндәрен һөйләмдәрҙә нығытыу.

*Сәлимә исемле ҡурсаҡ инә. Ул балалар менән магазин уйынын уйнай. Сәлимә – һатыусы, ә балалар – һатып алыусылар.* ***С – с’*** *өнө булған һауыт-һабалар йәки һүрәттәр ҡуйыла.*

*- Балалар, һеҙ магазинда нимәләр күрәһегеҙ? Нимәләр һатып алыр инегеҙ? Әйберҙәрҙең хаҡы: тылсымлы һүҙ – “зинһар өсөн”.*

*Бала:*

*- Зинһар өсөн, миңә самауырҙы (сәйнүкте, сынаяҡты, бысаҡты, кәсәне, стаканды, кәстрүлде, сәнскене) бирегеҙ әле.*

*Һәр бала бер әйбер һатып ала.*

10. Үрҙә бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө:

11. Шиғырҙы ятла:

Сәй эсеү.

Әсәй, өләсәй, ейәнсәр,
Өсәүләп сәй эсәләр.
Сәйнүк сәйен эсеп бөткәс,
Самауырға күсәләр.
Әсәй, өләсәй, ейәнсәр,
Сәскәләп сәй эсәләр.
Эсмәҫ саҡта эсерһең,
Сәскәле шул кәсәләр.

12. Дәфтәрҙә эш: сынаяҡты эшләү һәм биҙәү.

13. Йомғаҡлау.

# Өсөнсө дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Йылмайыу”, “Ҡойма”, “Көрәк”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Ҡоймаҡ ҡойоу”, “Бесәй асыулана”.

2. Бармаҡ уйындары.

Баш бармаҡ башҡа сыҡҡан,
Имән бармаҡ ир булған,
Сығанаҡ бармаҡ сығып ҡасҡан,
Һуҡ бармаҡ өҙә һуҡҡан,
Сәтәкәй бармаҡ сәпәкәй иткән.

3. **С’ – с’ – с’** өнөн бер тын сығарыуҙа оҙаҡ һуҙып әйт:

4. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатла:

әс – әс – әс – әтәс
әс – әс – әс – бәрәс
үс – үс – үс – күс
өс – өс – өс – көс
ис – ис – ис – кис

5. Йомаҡтарҙың яуабын тап:

Башы тараҡ, ҡойроғо ураҡ.
(әтәс)

6. ***Әтәс*** һүҙе менән һөйләм төҙө.

7. **С’** өнө булған һүҙҙәр уйла һәм уларҙа өндөң урынын билдәлә:

8. Ял минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы тейешле хәрәкәттәр эшләү:

Әсәйемде яратам!
Мин уға ярҙам итәм:
Кер йыуам,
Иҙән йыуам,

Уйынсыҡтарҙы йыям,
Әсәйемде яратам,
Ҡосаҡлап үбеп алам!

9. “Дүртенсе артыҡ” уйыны.

а) кәсә, сәйнүк, сәнске, бесәй;
б) сынаяҡ, кишер, бысаҡ, табаҡ;
в) утын, ут, ул, әтәс.

10. Атамаһында **с** өнө булған ҡоштарҙы әйт:

Сыйырсыҡ, һандуғас, ҡарлуғас, аҡсарлаҡ, сел, сәүкә, күгәрсен, сәпсек.

11. Телтөҙәткесте ятла:

Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ,
Оянҙан осоп сыҡ.
Осоп сыҡ, сыйырсыҡ
Күршеңде күреп сыҡ
Осоп сыҡ, сыйырсыҡ!

12. Аппликация “Сыйырсыҡ ояһы”.

13. Йомғаҡлау.

## [З] өнө өҫтөндә эш

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика: тартынҡы, яңғырау***

**З** өнөнөң артикуляцияһы: з өнөн әйткәндә ирендәр йылмайғандағы кеүек бер аҙ асыла; тештәр бер аҙ ҡыҫыла, телдең осо яҫы аҫҡы тештәр араһында урынлаша, тик ирендәр тауыш биреү ағзалары ҡушылып дерелдәйҙәр.

**З** өнө һүҙ башында, уртаһында, аҙағында ҡулланыла.

1. Бармаҡ уйыны.

Серәкәй

Серәкәй, мине тешләмә,
Мин бит һиңә теймәйем.
Йүгереп кенә өйөмә
Ҡайтып ҡына етәйем.

(Бармаҡтарҙы усҡа йомабыҙ, һуҡ бармаҡты алға һуҙырға. Сәтәкәй бармаҡты һәм баш бармаҡты аҫҡа төшөрөргә)

2. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Көрәк”, “Ҡоймаҡ”, “Бәүелсәк”, “Тештәрҙе таҙартыу”, “Ҡойма”

3. Ҙур серәкәй йырлай: з – з – з – з
(ҡулды тамаҡҡа ҡуйып, дерелдәүҙе тыңлау)

4. Ижектәрҙе ҡабатла:

За – за – за
Зо – зо – зо
Зу – зу – зу
Зы – зы – зы

5. Баҫымды үҙгәртеп әйт:

| | | |
|---|---|---|
| За – за – за | зо – зо – зо | зу – зу – зу |
| За – за – за | зо – зо – зо | зу – зу – зу |
| За – за – за | зо – зо – зо | зу – зу – зу |

6. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

За – за – зал
За – за – завод
За – за – заман
За – за – зар
Зо – зо – зонт
Зы – зы – зыян

7. Иғтибар менән тыңла һәм **з** өнлө һүҙҙәрҙе әйт:

Сумка, зал, ваза, самолет, завод, зонт, Наза, саған.

8. Ял минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр эшләү:

Тышҡа сыҡтыҡ,
Бысҡы алдыҡ,
Утын алдыҡ:
Зыңҡ-дыңҡ, зыңҡ-дынҡ!
Ике ҡулға балта тоттоҡ,
Утын ярҙыҡ:
Таҡ-тоҡ, таҡ-тоҡ!
Өйгә ҡайттыҡ.

9. Һүҙҙәрҙе күплектә әйт:

Ваза – вазалар
Закон –
Роза –
Зубр –
Зонт –
Завод –

10. Телтөҙәткесте ятла:

Зың – зың – зың – зыңлаған ҡыңғырау.
Зыр – зыр, зырлама, бында оҙаҡ торлама.

11. “Дүртенсе артыҡ” уйыны.

(дөйөмләштереүгә, иҫтә ҡалдырыуға, артыҡ предметты айырыуға күнегеү)

а) күлдәк, кофта, пальто, зонт;
б) ат, һыйыр, суска, зубр;
в) кишер, ҡыяр, һуған, роза.

12. Мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен аңлат:

а) Заман башҡа, заң башҡа.
б) Заман боҙоҡ түгел, әҙәм боҙоҡ.

13. Тексты һөйләргә өйрән:

*Атайым заводта эшләй.*

*Минең атайым - эшсе. Ул заводта эшләй. Заводта машина яһайҙар. Унда станоктар шаулай. Атайым тырышып эшләй, эшенә зарланмай. Мин дә, атайым кеүек, заводта эшләрмен.*

14. **З** хәрефен алфавиттан тап, ул нимәгә оҡшаған?

15. **З** хәрефен тәүҙә һауала, аҙаҡ - дәфтәргә яҙ.

16. Йомғаҡлау.

## [З'] өнө өҫтөндә эш

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика: тартынҡы, яңғырау***

**З’** өнөнөң артикуляцияһы: ирендәр йылмая, тештәр ҡыҫыла; тел яҫы, йомшартыла, тик тауыш ағзалары ҡыҫылҫан һәм дерелдәй.

1. Артикуляция, бармаҡ күнегеүҙәре.

2. Йомаҡтың яуабын әйт:

Безелдәр, тезелдәр, ер соҡор ҙа - һыу эсер.
(серәкәй)

3. Өноҡшаш уйын:

а) Ҙур серәкәй ошолай итеп безелдәй: з – з – з
б) Бәләкәй серәкәй ошолай итеп безелдәй: з’ – з’ – з’

4. Бер тын сығарыуҙа оҙаҡ итеп з’ – з’ – з’ өнөн әйт.

5. Ижектәрҙе дөрөҫ әйт:

| | |
|---|---|
| зә – зә | зә – зә – зә |
| зе – зе | зе – зе – зе |
| зө – зө | зө – зө – зө |

зи – зи                                  зи – зи – зи

6. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

Зә – зә – кәзә
Зе – зе – музей
Зи – зи – зирәк
Зө – зө – Зөлайха

7. Һүҙҙәрҙе ҡабатла:

Зиннәт, зиһен, гәзит, бензин, зәйтүн, магазин, зирәк, зәңгәр, Зөфәр, Зилә.

8. Һүҙҙәрҙе иҫеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла:

Кәзә – зирәк – музей – Зөфәр (һүҙҙәр тәртибе 3-4 тапҡыр алмаштырыла).

9. Ял минуттары.

Күрһәтегеҙ, балалар,
Ҡоштар нисек осҡанын.
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай осалар.

Күрһәтегеҙ, балалар,
Серәкәй безелдәүен.
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай безелдәй (з – з – з ).

10. Тел төҙәткесте ҡабатла:

Зә – зә – зә – баҡсала кәзә.
Зи – зи – зи – уҡыйбыҙ гәзит.

11. Шиғырҙы ятла.

Кәзә ингән баҡсаға,
Әсе үлән ашарға.
Кәзә һаҡалын һелкетә,

Әсе үлән кикертә.

12. **З’** өнө булған һүҙҙәр уйлап әйт һәм шул һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.

13. Ятла:

Зәлифә кейгән күлдәк,
Зәңгәр ерлек, күк биҙәк.

14. “Зәлифәнең күлдәген” төшөр.

15. Йомғаҡлау.

# Ц өнө өҫтөндә эш

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика:** тартынҡы, һыҙғырыусан, һаңғырау*

**Өндөң әйтелеше**: Т+С – ТС – өндәрен тиҙ генә ҡушып әйтеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә.

1. Артикуляцион күнегеүҙәр.

2. ТС – ТС – ТС – шәп итеп, күп тапҡырҙар ҡабатлау.

3. Өндәрҙе шәп кенә әйт:

атс – атс – атс - ац
отс – отс – отс - оц
ытс – ытс – ытс - ыц
етс – етс – етс - ец
итс – итс – итс – иц

4. Өҙөп-өҙөп **ц – ц – ц** өнөн әйт.

5. Ижектәрҙе иҫеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла:

Ца – ца – ца
Цу – цу – цу

Цо – цо – цо
Ци – ци – ци
Це – це – це

6. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:
Мотоцикл, цирк, цифр, концерт, цемент, цех, циркуль.

7. Ошо һүҙҙәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр төҙө.

8. Ял минуттары.

9. Хәҙерге заманда үҙгәрт:
Концертҡа барыу

10. Шиғырҙы ятла:
Матур күлдәк кейәйек тә
Сәсебеҙҙе тарайыҡ.
Шанан, апай, икәүләшеп
Цирк ҡарарға барайыҡ.

11. Алфавиттан **ц** хәрефен тап.

12. **Ц** өнөнә һүҙҙәр әйт.

13. **Ц** хәрефен тәүҙә һауала, аҙаҡ дәфтәреңә яҙ.

14. Йомғаҡлау.

# Ж өнө өҫтөндә эш

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика:*** ***тартынҡы, һыҙғырыусан, яңғырау тартынҡы***

**Ж** өнөнөң артикуляцияһы: ирендәр бер аҙ түңәрәкләнә һәм алға һуҙыла, тештәр бер-береһенә яҡыная; яҫы телдең осо ҡаты аңҡауға тейә һәм ек барлыҡҡа килә. Телдең урта өлөшө төшә, тик телдең сите яҡ тештәренә ҡыҫыла; телдең артҡы өлөшө күтәрелә һәм артҡа

тартыла; телдең уртаһынан йылы һауа сыға; тауыш ярылары тирбәлә, тартыла һәм тауыш барлыҡҡа килә.

**Ж** өнө һүҙҙең башында, уртаһында, аҙағында ҡулланыла.

1. Артикуляция күнегеүҙәре:
“Тештәрҙе таҙартабыҙ”, “Маляр”, “Бәшмәк”.

2. Уйын “Урманда ҡуңыҙ ниндәй тауыш сығара?” (ж – ж – ж)

3. **Ж** өнөн ижектәрҙә әйт:

| | |
|---|---|
| жа | аж |
| жи | иж |
| жә | әж |
| жы | ыж |
| жу | уж |
| жө | өж |

4. **Ж** өнөн һүҙҙәрҙә әйт:

Бөжәк, Жәлил, гөжләй, жыулай, Рәжәп, Ғиләж, Нәжип, гараж, дежур, багаж, журнал, таж.

5. *Бөжәк* һүҙен ижектәргә бүл һәм һүҙҙә **ж** өнөнөң урынын билдәлә.

6. Ж хәрефе менән таныштырыу.
[ж] өнөнөң хәрефен алфавиттан табыу, уның нимәләргә оҡшағанын әйттереү (бергә йәбешкән ике *к* хәрефенә, ҡуңыҙға, ҡар бөртөгөнә)

7. Ял минуттары.
Бармаҡтар күнекмәһе:

Бер-ике – өйрәктәр китте,
Өс-дүрт – һыу буйына,
Эйәрҙе уға бишенсе,

Алтынсыһы - артында.
Етенсе тороп ҡалған,
Һигеҙенсе арыған,
Туғыҙынсы йәшенде,
Унынсы ҡурҡып китте.
Нык ҡысырып баҡылдай:
“Быжыҡ – быжыҡ – быжыҡ,
Мин яҡында, эҙләп тап!”

(баш бармаҡтан башлап бармаҡтарҙы бер-бер артлы бөгөргә, “Быжыҡ-быжыҡ” һүҙҙәрен әйткәндә ике ҡулдың бармаҡтарын талғын ғына бер ритмда бөгөргә һәм асырға).

8. Телтөҙәткесте ҡабатла.

Жираф өйҙән дә бейек,
Жираф бик сәйер кейек.

9. С. Әлибаевтың “Өйрәктәр” шиғырын ятла.

“ - Ағай, ниңә өйрәктәр
Һәр саҡ “Быжыҡ – быжыҡ” – тиҙәр?
- Илағаныңды белгәндәр,
Һиңә: “Мыжыҡ – мыжыҡ”, - тиҙәр.

10. *Журнал* һүҙе менән һөйләм төҙө:

Миңә әсәйем “Аҡбуҙат” журналынан әкиәт уҡыны.

а) был һөйләмдә нисә һүҙ бар, уларҙы әйтеп сыҡ:

б*) журнал* һүҙен ижектәргә бүл, [ж] өнөнөң урынын билдәлә;

11. “Аҡбуҙат” журналы тураһында әңгәмә.

Был журнал кемегеҙҙең өйөндә бар? Уны ҡайҙан алып була? Кемдәр уға яҙылып өлгөрмәгән, әле лә һуң түгел. Атай-әсәйҙәрегеҙҙең иҫенә төшөрөргә онотмағыҙ.

12. Йомғаҡлау. Журналдан берәй әкиәтте уҡыу, уның буйынса әңгәмә үткәреү.

# Ш өнө өҫтөндә эш

## Беренсе дәрес

***Өнгә характеристика:*** ***тартынҡы, һаңғырау***

**Ш өнөнөң артикуляцияһы**: ш өнөн әйткәндә, ирендәр түңәрәкләнә һәм бер аҙ алға һуҙыла; тештәр бер-береһенә яҡыная, яҫы тел өҫкә күтәрелә; йылы һауа килә.

**Ш** өнө һүҙҙең башында, аҙағында, уртаһында ҡулланыла.

1. Артикуляция күнегеүе:

   “Сынаяҡ”

2. Бармаҡ уйыны “Ҡаҙ”:

   а) шиғырҙы ҡабатла:

   Ҡаҙ

   Ҡаҙ, ҡаҙ, ҡа – ҡа – ҡа,
   Ҡарама минең яҡҡа,
   Һуҙмасы муйыныңды,
   Боҙмасы уйынымды.

   б) суҡыш эшлә

Терһәкте өҫтәлгә ҡуябыҙ. Бармаҡтар төҙ тотола. Дүрт бармаҡты (баш бармаҡтан башҡа) алға һуҙып, ҡаҙҙың башын эшләйбеҙ. Баш бармаҡты әҙ генә аҫҡа төшөрәбеҙ. Асыҡ суҡышлы “ҡаҙ” килеп сыға.

3. **Ш** өнөн айырым әйт:

   “Ҡаҙ асыулана” – ш – ш – ш
   “Ата ҡаҙ асыулана” – Ш – Ш – Ш

4. Ижектәрҙе ҡабатла:

   а) шу
   шу – шу
   шу – шу – шу

б) баҫымды үҙгәртеп әйт:

шу – шу шу – шу – шу
шу – шу шу – шу – шу

5. Ял минуттары.

а) Асыуланып ҡаҙ ыҫылдай,
Әллә ашарға һорай?
- Ш – Ш – Ш.....
(ҡаҙҙың суҡышын эшләргә)

б) Көслө ел иҫә,
Ағастарҙы һелкетә.
Урман шаулай: - ш –ш – ш
(ҡулдарҙы өҫкә күтәрәбеҙ)

в) сысҡан япраҡтарҙы ҡыштырлата: - ш – ш – ш
(сүкәйеп ултырыу)

г) Ә балалар шаярмайҙар,
Тик кенә ултыралар.
(ултырғысҡа ултырыу).

6. Ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе ҡабатла:

шу – шу - шул
шу – шу - шуҡ
шу – шу - шулай
шу – шу - шунан
шу – шу –шундай

7. Телтөҙәткесте ҡабатла.

Шу – шу – шу – шулай ҡыҙыҡ уйлауы.

8. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Бәшмәк”, “Тәмле варенье”, “Гармошка”, “Маляр”

2. **Ш** өнөн әйтеү.

а) Бармаҡ уйыны “Ҡаҙ”

б) “Ҡаҙ асыулана” - ш – ш – ш

“Ата ҡаҙ асыулана” - Ш – Ш – Ш

в) “Урман шаулай” - ш – ш – ш

3. Ижектәрҙе ҡабатла:

а)

| | | |
|---|---|---|
| шу | ше | шә |
| шо | ша | шы |
| ши | шө | шү |

б)

| | |
|---|---|
| шу – шу | ше – ше |
| шо – шо | ша – ша |
| ши – ши | шә – шә |
| шө – шө | шы – шы |
| шү – шү | |

в) Баҫымлы ижекте дөрөҫ әйт:

| | |
|---|---|
| шу – шу | ше – ше |
| шо – шо | ша – ша |
| ши – ши | шә – шә |
| шө - шө | шы – шы |

4. “Ижек уйла” уйыны.

| Логопед | Бала |
|---|---|
| у | шу |
| о | шо |
| ы | шы |
| а | ша |
| ә | шә |
| э | ше |

5. Ял минуттары.

Беҙ япраҡтар, япраҡтар,
Ел өрҙө - беҙ остоҡ,
Ергә осоп төштөк.
Көслө ел иҫә -
Әйләнеп осоп киттек,
Тағы ла ергә төштөк.
Көслө ел иҫә:
Ш- ш – ш!

6. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатла.

| | |
|---|---|
| | шуҡ |
| шу – шу | шундай |
| | шулай |
| | шом |
| шо – шо | шоңҡар |
| | шомланыу |
| | шөрөп |
| шө – шө | шөбһә |
| | шөрләү |
| | шым |
| шы – шы | шыма |
| | шырпы |
| | шәл |
| шә – шә | шәкәр |
| | шәм |
| | шатлыҡ |
| ша – ша | шалҡан |

шаҡмаҡ

шик
ши – ши шинель
шифа

7. Һүрәттәр менән эш.
Һүрәттәрҙе ҡара һәм унда төшөрөлгән предметтарҙың атамаларын әйт:

Шөрөп, шырпы, шәл, шәкәр, шәм.

8. Йомаҡты сис:
а) Ҡар түгел – аҡ,
Боҙ түгел – ҡаты,
Тоҙ түгел – ирей.
(шәкәр)

*Шәкәр* һүҙе менән һөйләм төҙө.

б) Тын тултырһаң – тумалаҡ,
Тултырмаһаң – ҡомалаҡ.
(шар)

9. Дәфтәреңә шар һүрәтен эшлә.

10. Йомғаҡлау.

## Өсөнсө дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.
“Тәмле варенье”, “Сынаяҡ”, “Бәшмәк”.

2. Ижектәрҙе ҡабатла:

| | |
|---|---|
| аш | аш – аш |
| ош | ош – ош |
| уш | уш – уш |
| ши | ши – ши |

эш эш – эш

3. Ижектәрҙе уҡы:

аш ош
уш иш

4. Ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе ҡабатла:

аш – аш - аҙаш
ош – ош - ҡош
эш – эш - емеш
әш – әш - иптәш
өш – өш - көмөш
ыш – ыш - ҡыш
яш – яш - ҡояш

5. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп әйт; һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө:

Аҡҡош, ауылдаш, иптәш, көнбағыш, ҡыш, емеш.

6. Һүрәттәр менән эш:

Дидактик уйын “Нимә юғалды?”

7. Ял минуттары.

Һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр эшләү:

Поезд килә, поезд килә:
Шу – шу – шу, шу – шу – шу
Юлда торма, юлда торма:
Шик – шик – шик, шик – шик – шик
Поезд туҡтаны:
Ш – ш – ш, ш – ш – ш.

8. “Дүртенсе – артыҡ” уйыны. Ниндәй һүҙ артыҡ, ни өсөн?

а) шалҡан, кишер, ашҡабаҡ, миләш;
б) редис, помидор, груша, ҡыяр;
в) алма, шалҡан, апельсин, слива.

9. Телтөҙәткесте ҡабатла:

Шамилдың шары шартланы.
Шамил шуға шаңҡып, шып-шым ғына шаҡ ҡатты.

10. Шиғырҙы ятла:

Миләш ултыртып үҫтерә
Өй алдында Миләүшә.
Ҡыш еткәс, ул емештәрен
Турғайҙарға өләшә.

11. *Миләш* ағасын дәфтәреңә эшлә.

12. Йомғаҡлау.

## Дүртенсе дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.

“Сынаяҡ”, “Тәмле варенье”, “Бәшмәк”.

2. Ижектәрҙе ҡабатла:

ша – аша
шо – ашо
шу – ашу
шы – ышы
шы – ашы
ши – әши
ше – әше
шу – ушы
шә – әшә

3. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатла.

аша – аша – башаҡ
аша – аша – башалтаҡ
ише – ише – бишек
уша – уша – бушатҡыс
әше – әше – йәшелсә
ушы – ушы – ҡушымта

әшә – әшә – мәшәҡәт

4. Телтөҙәткесте ҡабатла:

Ша – ша – ша – Шамил шарға талаша
Шы – шы – шы – ҡыҙыу уйын барышы.
Шә – шә – шә – малайҙар шар бәрешә,
Ше – ше - ше – уйнай ала һәр кеше.

5. Һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө:

Ашхана, йомшаҡ, йәшелсә, йәшел, шишмә, себеш.

6. Һүҙҙе әйтеп бөтөр:

Ке...   (ше)
Ба...   (ш)
Аҡҡо...   (ш)
Көмө...   (ш)
Көнбағы...   (ш)
Милә...   (ш)
Ҡоя...   (ш)
Миләү...   (шә)

7. Ял минуттары.

Күрһәтегеҙ, балалар,
Ағас нисек үҫкәнен.
Бына шулай, бына шулай
Бына шулай үҫәләр.

Күрһәтегеҙ, балалар,
Көслө елдең иҫкәнен.
Бына шулай, бына шулай
Бына шулай иҫәләр
Ш – ш – ш – ш – ш .

Күрһәтегеҙ, балалар,
Ағастарҙың шаулауын.

Бына шулай, бына шулай
Бына шулай шаулайҙар.

8. Мәҡәлдәрҙе ҡабатла һәм мәғәнәһен аңлат:

а) Бишектәге бала бишкә төрләнә.
б) Ашыҡҡан – ашҡа бешкән.
в) Ашы – ашҡа, урыны башҡа.
г) Эшләгәнең – кешегә, өйрәнгенең – үҙеңә.
д) Эш белгәнгә – уңыш юлдаш.

9. Шиғырҙы ятла:

Миләш ултыртып үҫтерә
Өй алдында Миләүшә.
Ҡыш еткәс, ул емештәрен
Турғайҙарға өләшә.

Ҡошҡайҙары, ашап туйғас,
Сырҡылдаша – серләшә,
Миләүшәгә өндәшә:
“Мең-мең йәшә, Миләүшә!”.

10. Алфавиттан **Ш** хәрефен тап, дәфтәреңә яҙып ҡуй.

11. Йомғаҡлау.

# Р өнө өҫтөндә эш

***Өнгә характеристика:* тартынҡы, яңғырау**

*Р өнө һүҙ башында, һүҙ уртаһында, һүҙ аҙағында ҡулланыла.*

## Беренсе дәрес

**Р өнөнөң артикуляцияһы**: ирендәр түңәрәкләнә, тештәр араһында арауыҡ ҡала, тел осо әҙ генә күтәрелеп, өҫкө тештәр өҫтөндәге альвеоларға тейеп дерелдәй.

1. Артикуляция күнегеүҙәре

«Көрәк», «Бәүелсәк», «Маляр», «Ат», «Бәшмәк», «Сынаяҡ», «Автомат», «Барабан», «Гармун».

2. Өноҡшаш уйындар:
а) юлбарыҫ үкерә: «р-р-р»
б) самолеттың моторы геүләй: «р-р-р».

3. Ижектәрҙе дөрөҫ әйт:
*ру- ро*
*ра – рә*

4.Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатла:
*ра-ра — ракета*
*ру-ру - руда*
*ро-ро — роза*

5. Һүҙҙәрҙе иҫеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла:
*ракета — руда — роза.*

6. Ял итеү минуттары:
*Ҡулдарҙы йәйҙек,*
*Булдык инде самолет,*
*Дырылданы: р-р-р*
*Геүелдәне: р-р-р-р.*
*Осоп китте самолет,*
*Килеп еттек ҡалаға,*
*Самолет шәп осҡанға.*
(Һүҙҙең мәғәнәһенә ҡарап, хәрәкәттәр эшләргә).

7. *Ракета, роза* һүҙҙәре менән һөйләм төҙө.

8. Телтөҙәткесте ятла:
*Ра-ра-ра — Радик айға осһа,*
*Ра-ра-ра — ракетала ул елә.*

9. Аппликация «Ракета».
10. Йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес
1. Артикуляция күнегеүҙәре.

2. Бер тын сығарыуҙа, оҙаҡ р-р-р өнөн әйтеү.
3. Үткән дәрестәге һүҙҙәрҙе иҫеңә төшөрөп әйт.

4. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйт:

*ара-ара — арал (остров)*
*ара-ара — ҡарағат*
*ура-ура — урам*
*ар-ар — ҡарға*
*ор-ор — орлоҡ*
*оро-оро — борос*
*ур-ур — урғыс*

5. Фонематик ишетеүгә күнегеүҙәр: Р өнө булған һүҙҙәрҙе ишетһәң, сәпәкәй ит:
*Барабан, урам, салғы, орлоҡ, око, ҡарға, утын, ҡарағат, бала.*

6. Ҡарағат, борос, груша һүҙҙәре менән һөйләм төҙө.

7. Ял минуттары:
*Беҙ киләбеҙ иркен баҫып,*
*Һәр кем алға ҡараған,*
*Йөрәктәрҙә дәрт урғыла,*
*Тауыш бирһә, барабан,*
*Та-ра, та-ра, та-ра-там,*
*Тыуған илгә йырла дан,*
*Барабан,*
*Йырла дан!*
(Һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә ҡарап, хәрәкәттәр эшлә).

8. Шиғырҙы ятла:
*<u>Барабан</u>*
*Тра-та-та, тра-та-та!*
*Барабан тора һакта.*
*Тра-та-та, тра-та-та!*
*Яңғырай тирә-якта.*

9. Йомаҡтарҙың яуабын тап:
а) Ҡумта эсендә кеше: Йырлау, һөйләүҙә эше.
(Радио)
б) Йәйен, ҡышын бер төҫтә, Үҙгәрмәй ул бөртөк тә.
(Шыршы)
в) Эсе ҡыҙыл, тышы йәшел.
(Ҡарбуз)

10. Шыршы, ҡарбуз һүрәттәрен дәфтәреңә төшөр.
11. Йомғаҡлау.

## Өсөнсө дәрес

1. Артикуляция күнегеүҙәре.
2. Өноҡшаш уйын:
*Ҡарға әйтә: «Ҡаррр-каррр».*
3. Ижектәрҙе ҡабатла: *ар-ар-ар ор-ор-ор ыр-ыр-ыр*
4. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатла:
ар-ар-ар — салбар
ар-ар-ар — ҡарар
ар-ар-ар — ҡусҡар
ор-ор-ор — лектор
ор-ор-ор – отҡор
ур-ур-ур — матур
ур-ур-ур – нур
ыр-ыр-ыр — сайыр
ыр-ыр-ыр — сыр
ыр-ыр-ыр — тамыр

5. Һүҙҙәрҙе ижеккә бүл һәм һөйләмдәр төҙө: *Салбар, ҡарағат, ултырғыс, ракета, арғымаҡ.* «Баҡсала нимә үҫә» дидактик уйыны.
(Таҡтаға һүрәттәр эленә, балалар уларҙың исемдәрен әйтә). *Картуф, помидор, ҡыяр, борос, груша, ҡарағат.*

6.(Бер һүҙ менән нисек әйтергә мөмкин, аңлат).

7.Ял итеү минуттары.
*Мин килдем, килдем, килдем,*
*Ҡыҙыл помидор таптым.*
*Тәмле помидор, тиеп*
*Алып ауыҙға ҡаптым.*
(Хәрәкәттәр эшләргә: атлау, сүгәләү, баштарын һелкеү, ҡабыу).

8. Күплектә әйт:
*Помидор, ҡыяр, груша, еләк, алма, сөгөлдөр.*

*9.*Мәҡәлде хәтерҙә ҡалдыр, мәғәнәһен аңлат: *Тырышҡан табыр, Ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр.*
10. Һамаҡты ятла: *Ҡарға әйтә: « Ҡарр, карр,*
*Мейестә бәлеш бар р, бар р, Мейестән бәлеш алыр инем,*
*Өйҙә ҡунаҡ барр, барр».*
11. Р хәрефен алфавиттан тап һәм дәфтәреңә яҙып ҡуй.
12. Йомғаҡлау.

## Дүртенсе дәрес
## Р өнө

*һүҙ башында, һүҙ уртаһында, һүҙ аҙағында ҡулланыла.*

1. Артикуляция күнегеүҙәре.
2. Бер тын сығарыуҙа, оҙаҡ р-р-р өнөн әйтеү.
3. Ижектәрҙе ритмик рәсемен үҙгәртеп әйт:

*рә-рә — рә-рә-рә*
*рө-рө - рө-рө-рө*
*рү-рү – рү-рү*
*ри-ри — ри-ри-ри*

4. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатла:

*рә-рә-рә — рәт*
*рэ-рә-рә — рәхәт*
*рө-рө-рө – бөрө*
*ре-ре-ре — бүре*
*рек-рек-рек — бүрек*
*ер-ер-ер — ғүмер*
*ер-ер-ер — дәрес*
*әр-әр-әр — дәрт*
*нр-нр-ир — ирек*
*ир-ир-ир — иртүк*
*өр-өр-өр – өрө*
*үр- үр-үр-үр — үрмәксе*

5. Иçеңдә ҡалдыр һәм ҡабатла:
Бүре — дәрес — бөрө - үрмәксе (һүҙҙәр тәртибен 4 тапҡыр үҙгәрт)

6. Ял итеү минуттары:

*Балалар, балалар,*
*Урман буйлап баралар,*
*Һикереп тә алалар,*
*Йүгереп тә алалар,*
*Сүкәйеп тә алалар,*
*Һаман алға баралар.*
(Һүҙҙең мәғәнәһенә ҡарап хәрәкәттәр эшләргә).

7. Бүре, бүрек, бөрө, үрмәксе һүҙҙәре менән һөйләмдәр төҙө.

8. Тел төҙәткестәрҙе ятла:

*Кәк-күк, кәк-күк — саҡыра кәкүк.*
*Рүк-рүк-рүк-рүк — туҡтама берүк.*
*Рәк-рәк-рәк-рәк — саҡыр шәберәк,*
*Кәк-күк, кәк-күк — ниндәй аяҙ күк.*

9. Тел төҙәткесте ҡабатла.

*Рә-рә-рә — урман буйлап йүгерә,*

*Ра-ра-ра — ҡулын болғап саҡыра.*
*Рө-рө-рө — япраҡ ярған бөрө,*
*Рө-рө-рө — урманда тыныс йөрө.*

10. Тексттың йөкмәткеһен һөйлә.
*Ришат сынаяҡ йыуа ине. Ул ялтыр биҙәкле сынаяҡты ярҙы. Бер кеше л ә күрмәне быны. Әсәһе ҡайтҡас улынан:*
*- Кем ярҙы? — тип һораны.*
*- Мин... - тине Ришат ҡурҡа-ҡурҡа.*
*- Афарин, дөрөҫөн әйттең, рәхмәт, улым, - тине әсәһе.*

11. Сынаяҡ һүрәтен эшлә.

12. Йомғаҡлау.

## Ҡулланылған әҙәбиәт:


1. Аҙнабаева Ф.Г., Нафиҡова З.Г. Тылсымлы өндәр. - Өфө, 2004.
2. Балалар фольклоры. -Өфө, Китап, 1994.
3. Буденая Т.В. Логопедическая гимнастика. —Санкт-Петербург, 2003.
4. Волкова Л.С., Шаховская С.М. Логопедия. —М.: Владос, 2003
5. Журова Л.С. Обучение грамоте в детском саду и его значение для развития ребенка. — М, 1971.
6. Лалаева Р.И., Серебрякова Н.В. Формирование правильной разговорной речи у дошкольников, - Ростов-на-Дону, «Феникс», Санкт-Петербург, «Союз», 2004.
7. Йәғәфәрова А.Ш., Юлмөхәмәтова М.Б. Йәйғор. Балалар баҡсаһының кескәйҙәр һәм уртансылар төркөмдәре өсөн хрестоматия. I китап.-Өфө: Китап, 1995.
8. Йәғәфәрова А.Ш., Юлмөхәмәтова М.Б. Йәйғор. Балалар баҡсаһының өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре өсөн хрестоматия. II китап.- Өфө: Китап, 1995.
9. Филичева Т.Б., Чиркина Г.В. Воспитание и обучение детей дошкольного возраста с фонетико-фонематическим недоразвитием. — М.: Школьная пресса, 2003.
10. Филичева Т.Б., Чиркина Г.В. Устранение общего недоразвития речи у детей дошкольного возраста. — М.: Айрис-пресс, 2004.
11. Ракаева Ә.С. Уйнайыҡ уйлап ҡына. — Өфө: Китап, 2008.